Билал ауылы биләмәһе нең 4-се округының

Һәмән ауылы депутаты

Сафина Айгөл Нуритдин ҡыҙының

доклады

Хөрмәтле Илдар Шәғәргәзе улы,

саҡырылғандар!

Мин Сафина Айгөл Нуритдин ҡыҙы, Билал ауыл биләмәһенең 4 -се округының Һәмән ауылы депутаты булып 2019 йылда һайландым.

Бөтәгеҙгә лә мәғлүм булыуынса,үткән йыл Төҙөкләндереү һәм экология йылы тип иғлан ителде. Өшө сараларҙы ойошҡанлы атҡарып сығыу өсөн Ауыл советы һәм хакимиәте тарафынан яуаплы кешеләр һәм үткәреләсәк саралар планға ярашлы алып барылды, ауыл Советы депутаттары был сараларҙан ситтә ҡалманы.

Беҙҙең Һәмән ауылында 93 өйҙә 349 кеше йәшәй, шул иҫәптән 76 бала, эшкә яраҡлы йәштәгеләр 203, ололар 62, уҡыусы балалар 40. Һәмән ауылында эшҡыуарлыҡ өлкәһендә эшләүселәр бар һәм уларҙың һаны арта бара, 93 шәхси хужалыҡ, улар күпләп мал үрсетеп, ит-һөт ризыҡтары һатып тормош итә, 1 мәсет, 2 магазин эшләп килә.

Берҙәм Рәсәй партияһының «Аныҡ эштәр» программаһы буйынса Һәмән ауылы зыяратының ағас бағаналары тимергә алмаштырылды, депутат булараҡ шул сараларҙан ситтә ҡалмайым, өмәләр ойоштороп, мәсьәләргә сәй табыша әҙерләнем, бөгөнгө көндә ауыл халҡынан зыяратты профлист менән кәртәләүгә аҡса йыйыу дауам ителә.

Ағинәйҙәр, ауыл ҡатын-ҡыҙҙары менән берлектә Еңеүҙең 75 йыллығына обелискты тәртипкә килтерҙек, Ҡаран ҡотоғон буяныҡ.

«Айыҡ ауыл-2020» конкурсында ла ситтә ятып ҡалмай, ауыл халҡын берләштереп зур саралар үткәрҙек. Баймаҡ башҡорттары ҡоролтайынан, Һаҡмар гәзитенән хәбәрселәр саҡырҙыҡ. «Бөтә ауыл менән Һаҡмарға яҙыл» акцияһында ауылдаштарыбыҙҙы гәзиткә әүҙем яҙҙырыуға өлгәштем, бүләктәр отоп ҡыуандылар. Ауылдың уңған ғаиләләре менән таныштырып, район гәзитендә зур мәҡәлә донья күрҙе.

Һәмәндә мәҙәниәт йорто, библиотека булмаһа ла, ауылдың депутаттары, Ағинәйҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар советы менән берлектә ауыл халҡы өсөн төрлө мәҙәни саралар үткәреп тора. Айырыуса ай һайын үткән йәрминкәләрҙе, Яңы йыл бал-маскарадын халыҡ яратып ҡабул итә. Сәләмәт йәшәү рәүешен яҡлау маҡсатында,

ҡатын-ҡыҙҙар араһында скандинав йөрөү ойоштороҙоҡ һәм күрше Билал ауылына эстафетаны тапшырҙыҡ.

Депутат булараҡ Билал ауылы Советының ййыйылыштарын ҡалдырмай ҡатнашып барам. Хакимиәт, ауыл Советы депутаттары, район Советы депутаты Набиуллин Рөстәм Радик улы менән дә бәйләнештә торам. Ауыл тормошонда килеп сыҡҡан һорауҙарҙы ауылдаштар менән берлектә хәл итергә тырышабыҙ. Беҙҙә ауыл халҡы берҙәм һәм ярҙамсыл бит ул. Ошо сараларҙы атҡарып сығарыуҙа ярҙам итешеүсе ауылдаштарыма рәхмәтемде белдерәм. Халыҡ беҙгә ышаныс белдереп, беҙҙе һайлаған икән, бергәләп артабан да эшләргә кәрәк, эшләнәсәк эштәр күп әле. Район һәм ауыл Советы депутаттарын әүҙем булырға саҡырам, халыҡ менән йышыраҡ аралашырға, халыҡтың көнкүрешен яҡшыртыуҙы маҡсат итеп алырға өндәйем!

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!